# Дәрес темаһы: Башkортостандың баш kалаһы - Өфө.

Маkсат: 1. грамматик теманы ныгытыу;

2. һөйләү телмәрен үҫтереү, бер телдән икенсе телгә тәржемә өҫтөндә эшләү;

3. тыуған яkkа kарата һөйөү тәрбиәләү, Башkортостандың баш kалаһы тураһында мәғлүмәт арттырыу.

Йыһазландырыу: Өфө kалаһын һүрәтләгән картиналар.

Үҙләштереү өсөн һүҙҙәр: кәйеф, яkтырта, бөтәһе лә, kайҙалыр ашыға, яй ғына, нисек барырға икән, һораным, һәйбәт итеп аңлатты, әйткәнсә, ғорурланам.

**Дәрес барышы:**

1. Ойоштороу мәле.
2. Артикуляцион күнегеү. Бөгөнгө число, аҙна көнө, һаua торошо тураһында әңгәмәләшеү.

Дәресте шиғыр тыңлауҙан башлап ебәрәйек әле.

Тау башында
Балkый бер kала,
Ул kала - Өфө тип атала.

3. **Өйгә эштәрегеҙҙе тикшереп үтәйек әле**. Һеҙгә Өфө kалаһында булған берәй һәйкәл тураһында белешмә әҙерләп килергә ине.
4. Ә хәҙер интерактив таkтаға kарағыҙ әле, унда 5 һөйләм бирелгән. Һеҙ улар дөрөҫме, юkмы икәнен билдәләп әйтергә тейешһегеҙ.

| | эйе | юk |
|---|---|---|
| 1) Өфө Башkортостандың баш kалаһы | + | |
| 2) Өфө kалаһы Ағиҙел буйында урынлашkан | + | |
| 3) Яр башында дүрт мөһабәт һәйкәл бар | | + |
| 4) Өфө kалаһында мәсеттәр юk | | + |
| 5) Беҙҙең баш kалабыҙҙа өс театр бар | | + |

-Ә һеҙ театрҙа булғанығыҙ бармы?

5. Әйҙәгеҙ театрҙар буйлап сәйәхәт итеп алайыҡ. Ысынлап та Өфө ҡалаһында алты театр бар:

1) Уфимский русский драмтеатр.**Республика урыҫ драма театры**. Унының тарихы 1861 йылда башлана. Октябрь проспектында урынлашҡан.

2)Башкирский государственный театр кукол. **Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры**-1932 йылда эшләй башлай. 330 урынлы.

3) Башкирский государственный академический драм театр им. М.Гафури. **М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры**. 1919 йылда Стәрлетамаҡта беренсе дәүләт театр булып эшләй башлай. 620 кеше һыйғыҙа.

4) Башкирский государственный театр оперы и балета. **Башҡорт дәүләт опера һәм балет театры.** 1938 йылда асыла.

5) Национальный молодежный театр респ. Башкортостан им. М.Карима. **М.Кәрим исемендәге мили йәштәр театры**-1989 йылда «ТЮЗ» булып эшләй, 1995 йылдан йәштәр театры итеп атала башлай. Ике труппа эшләй: башҡорт һәм урыҫ.

6) Уфимский татарский театр «Нур». «**Нур» татар дәүләт драма театры**. 1912 йылдан уҡ эшләй, ләкин 1912 йылда граждандар һуғышы башлана һәм ул ябыла. 1989 йылда тағы ла асыла. 1991 йылда дәүләт театрына әйләнә, 1999 йылда яңы театрға күсәләр.

- Ә һеҙ театрҙа булғанығыҙ бармы?

Булмаһағыҙ, мотлаҡ барып үҙ күҙегеҙ менән күреп ҡайтырға тырышығыҙ

- Һеҙгә ниндәй театр оҡшаны?

5. **Өйгә эш:** үҙегеҙгә оҡшаған театр тураһында пркт әҙерләп килегеҙ (һүрәте һәм тексты булһын)

6. Ә хәҙер мин һеҙгә диалог тәҡдим итәм, тик уның һөйләмдәрен дөрөҫ урынлаштырырға кәрәк.

1. —Хәлдәр нисек?
2. —Сәғәт етенсе яртыла театр янында көтәм.
3. -Һаумы, Ринат!
4. —Шәп! Бөгөн Милли йәштәр театрында премьера! Мин һине спектаклгә саҡырам, Гүзәл.

а) —Ярай. Осрашҡанға тиклем!
б) —Рәхмәт, Ринат. Ҡайҙа осрашабыҙ?
в) — Рәхмәт,яҡшы. Ә һинеке?
г) -Һаумы, Гүзәл!

3-г; 1-в; 4-б; 2-а

**ФИЗМИНУТКА ҮТКӘРЕҮ.** Күҙҙәрҙе ял иттерәбеҙ.

7. Диалогты һөйләгәндә ниндәй ҡылымдар ҡулландығыҙ?

-саҡырам

-осрашабыҙ

-көтәм

Улар ниндәй затта, һанда тора, барлыҡтамы (утвердительной), юҡлыҡтамы (отрицательной)?

Хәҙер ошо ҡылымдарҙы төрлө затта, һанда, барлыҡ һәм юҡлыҡ формаһында үҙгәртәйек.

**Эш дәфтәрҙәрен асығыҙ бөгөнгө числоны, класс эшен яҙып ҡуяйыҡ.**

| *барлыҡ* | *берлек* | *күплек* |
|---|---|---|
| 1 зат | саҡырам | саҡырабыҙ |
| 2 зат | саҡыраһың | саҡыраһығыҙ |
| 3 зат | саҡыра | саҡыралар |
| *юҡлыҡ* | *берлек* | *күплек* |
| 1 зат | саҡырмайым | саҡырмайбыҙ |
| 2 зат | саҡырмаһың | аҡырмайһығыҙ |
| 3 зат | саҡырмай | саҡырмайҙар |

Уҡыусыларҙы тыңлап ҡарау.

8. Дәреслектәр менән эшләп алайыk.

**59-сы бит, 118-се күнегеү.**

Тексты тасуири уkығыҙ, таныш булмаған һүҙҙәрҙе һүҙлектән kарап, дәфтәрҙәрегеҙгә яҙып kуйығыҙ. Беҙ уларҙы беҙҙең һүҙлек дәфтәренә яҙабыҙ, әлбиттә.

Мин театрға барҙым!

Бөгөн көн бик һәйбәт. Минең кәйефем дә бик шәп. Мин Өфө урамы буйлап китеп барам. Хәҙер беҙҙең каникул. Өфөләге өләсәйемдәргә kунаkkа килдем.

Урамға сыkтым. Ҡояш яkтырта. Кешеләр урамда бик күп. Улар бөтәһе лә kайҙалыр ашыға. Ә мин яй ғына китеп барам. Спектакль сәғәт 12-лә генә башлана. Ваkыт бар әле.

Өйҙән сығып, бер аҙ барғас та мин бер kыҙҙан: «Башkорт дәүләт академия драма театрына нисек барырға икән?»-тип һораным. Ул миңә бик һәйбәт итеп аңлатты. Ҡыҙ әйткәнсә, ө-се номерлы троллейбусkа ултырҙым да киттем.

Тәҙрәнән kарай-kарай барҙым. Өфө бик матур kала икән. Бейек йорттар бик күп төҙөлгән. Мин баш kалабыҙ - Өфө менән ғорурланып барҙым.

9. Өфө тураһында белешмә биреү. Интерактив таkта аша һүрәттәр күрһәтеү.
10. Дәресте йомғаklау. Билдәләр kуйыу.